***Клара ҒИЛӘЖЕВА,***
***Рәсәйҙең һәм Башҡортостан Республикаһының***
***атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре***



# Балет донъяһының гүзәл аккошо

Нинель Юлтыева һәр саҡ Башҡортостанды, бала саҡ бишеге — Өфөһөн һағынып ҡайта. Осрашыуҙар өсөн көндәрҙе сәғәтләп бүлә. Ҡайтҡан һайын мотлаҡ Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында булырға, замандаштарын күреп һөйләшергә, балет спектаклдәре ҡарарға форсат таба. Бына әле лә ул онотолоп ”Сыңрау торна” спектаклен ҡарай. Күңелен эске тулҡынланыу биләп алған. Ул сихри балет донъяһына ошо сәхнәнән талпынды, талант бейеклегенә күтәрерҙәй ҡанаттарын ошонда нығытты. Ә инде сәхнәләге Зәйтүнгөл — ҡасандыр ул осоп, талпынып бейегән, меңдәрсә тамашасының күңелен әсир иткән, ятаҡан ролдәренең береһе. Йәнә, йәшлеге менән осрашыу ҙа.

Ә театр уға эш урыны ғына түгел, йәшәү урыны ла булды. Ана ул — үкһеҙ, йортһоҙ ҡалған Нинелдең йоҡлап йөрөгән ложаһы. Ирекһеҙҙән ҡарашы шунда йүнәлә. Спектаклдән тамашасылар таралышып бөткәнен көтөп алыр ҙа шунда баш терәр ине. Ләкин, бейеп тамам арыған булһа ла, күҙенә һис йоҡо инмәй. Күңеле менән үҙҙәренең театрға яҡын ғына торған фатирына ҡайта. Хәйер, ул саҡтарҙа ғына түгел, хатта йылдар үткәс тә, ҡасандыр бәхет һәм шатлыҡ ташып торған атай йортона тартылып ҡына торҙо күңеле. Әле лә, спектакль тамамланып театрҙан сығыуға, аяҡтары үҙенән-үҙе Ленин урамы буйлап атланы. Бына ул икенсе һанлы йорт. Ҡарашы менән ҡасандыр үҙҙәре йәшәгән етенсе фатирға күтәрелде. Тәҙрәнән төшкән ут яҡтыһында атаһы менән әсәһенең таныш һындары күренеп ҡалғандай булды. Илаһым, ниндәй бәхетле ине уларҙың ғаилә ояһы. Күптәр тартыла ине уларға: яҙыусылар, артистар, музыканттар. Әсәһе йүгереп йөрөп табын әҙерләй. Атаһы ла шундай шат. Шиғырҙар уҡыла, матур һүҙҙәр һөйләнелә.

Ҡунаҡтар араһында йыш ҡына балетмейстер Фәйзи Ғәскәров та була. Нинелдең бейергә әүәҫлегенә, тәбиғи талантына башлап ул иғтибар итә лә инде. Юлтыевтарға ҡыҙҙарын хореография училищеһына уҡырға ебәрергә кәңәш бирә. Улар Ғәскәровтың кәңәшен тота. Бәхеткә тигәндәй,

шул мәлдә Ленинградтағы А.Я.Ваганова исемендәге хореография училищеһында башҡорт бүлеге асырға ҡарар ителә. Һайлап алынған малайҙар һәм ҡыҙҙар араһында Нинель дә була. Һуңыраҡ Нинель Дауыт ҡыҙы: ”Ленинградта уҡыған йылдарым — ғүмеремдең матур миҙгеле, ә педагогтарым — иң яҡын кешеләр, улар араһында мине замананың аяуһыҙ ел-дауылдарынан ҡурсалаусылар булды”, — тип хәтерләйәсәк. Тәүҙән үк, бала саҡтан үтә тырыш, бейеүгә мөкиббән ҡыҙ тиҙ арала иң яҡшы уҡыусыларҙың береһенә әүерелә. Иртәнән кискә тиклем минутлап тигәндәй иҫәпләнгән ҡаты уҡыу режимы, даими күнекмәләр, ятаҡтағы күмәк тормош, С.М.Киров исемендәге (хәҙер Мариинский) театрҙа донъяға билдәле балет оҫталары ҡатнашлығындағы спектаклдәрҙе ҡарау, училищеның бәләкәй театрында тәүге сығыштар — бына ниндәй бала саҡтың онотолмаҫ иҫтәлектәре. Илаһи сәнғәт донъяһына ауыр ҙа, ләззәтле лә юл шулай башлана.


*Нинель Дауыт ҡыҙы Юлтыева*

Башҡорт бүлеге уҡыусылары — Нинель Юлтыева, Зәйтүнә Насретдинова, Тамара Хоҙайбирҙина, Хәләф Сәфиуллин, Фәүзи Саттаров, Ғәлиә Хафизова, Рәйсә Дербишева, Фәрит Йософовтар училищеның ғорурлығы була. Уларҙың тәүге уңыштары менән ата-әсәләрен, яҡташтарын һөйөндөрмәксе булып, педагогтары — күренекле бейеүсе һәм балетмейстер, элекке император балеты солисы, үтә кеселекле остаздары Александр Ширяев балаларҙы Өфөгә концерт ҡуйырға алып килә. Александр Викторович Юлтыевтарға фатирға урынлаша. Опера һәм балет театрында буласаҡ балет йондоҙҙары училищела өйрәнгән оҫталыҡтарын күрһәтә, бер нисә концерт бирәләр. Концерттар тамамланғас, Юлтыевтар ҡыҙҙары Нинелде пионер лагерына ялға ебәрергә ниәтләнә. 27 июль көндө ғаилә Александр Ширяевты оҙата. Шул төндә ҡаты итеп ишек шаҡыйҙар. Ишек асылыуға бер нисә кеше атылып тигәндәй килеп инә лә, өйҙөң аҫтын өҫкә килтереп, тентеү башлай. Һуңынан аталарын үҙҙәре менән алып китәләр. Шулай итеп, Дауыт Юлтыйҙы ”халыҡ дошманы”на, ә Фатима ханымды ”халыҡ дошманы” ҡатынына әйләндерәләр. Ун бер йәше лә тулмаған Нинелдең дә, ағаһы Таңдың да ҡара көндәре шулай башлана. Фатима ханым балаларын нисек тә ҡурсаларға тырыша: кемдер уларға йәнә бер тапҡыр ”халыҡ дошманы” балаһы тип төртөп күрһәтмәһен өсөн урамға ла сығарып йөрөтмәҫкә тырыша: ”Атайығыҙ тиҙҙән, бик тиҙҙән өйгә ҡайтасаҡ”, — тип йыуата. Күрше-тирә, таныш-белештәр уларҙан ситләшә, осрашҡанда ла урап үтергә тырыша. Балалар йәнә шуны ла күреп-тойоп тора: әсәләре ни тиклем һиҙҙермәҫкә тырышһа ла, күҙенән хәүеф китмәй, тамағына аш бармай. Ә бер көн Фатима ханымды балалары менән йәшәгән фатир-

ҙарынан сығаралар. Социалистик урамында йәшәгән бер әбейҙең ишек алды бүлмәһенә урынлаштыралар.

Сентябрь етә. Нинель, уҡыуын дауам итеү өсөн Ленинградҡа китергә тип, бәләкәй сумаҙанын тотоп вокзалға төшә. Поезд ҡуҙғалырға һанаулы ғына минуттар ҡалған, һабаҡташтарҙы бер рәткә баҫтыралар. Һәм, һин "халыҡ дошманы" балаһы, тип, Нинелде ҡулынан тотоп рәттән ситкә сығаралар. Поезд ҡуҙғала, Нинель әсәһенең күкрәгенә ҡапланып, үкһеп илап ҡала...

Эйе, ул көндәрҙең ут-ялҡынына, фажиғәһенә әсәләре Фатима ханым нисек түҙгәндер. Ул бигерәк тә балалары өсөн борсола. Сөнки бик тиҙҙән үҙен дә Сталин лагерына оҙатасаҡтарын күңеле менән һиҙенә. Шуға тиклем балаларымды ғына Өфөнән алыҫҡараҡ оҙатып, ышаныслы ҡулдарға тапшыра алһам ине, тип Хоҙайҙан ялбара.

Бәхетенә күрә, изге күңелле кешеләр табыла. Александр Ширяев, Өфөнән килгән балалар араһында Нинелдең юҡлығын күреп, хәлдең ниҙә икәнен белгәс, Фатима ханымға аҡса һәм посылкалар ебәрә. Бының алыҫ Ленинградтан балаһына ярҙам булырына ишара икәнен аңлай әсә кеше. Ул, әлеге өмөт саткыһын тойоп, октябрь айының ҡараңғы бер төнөндә ҡыҙын етәкләй ҙә, ҡаса-боҫа вокзалға йүнәлә. Юлға етерлек аҙыҡ төйнәп, Нинелде Ленинград яғына китәһе поезға ултырта. "Берәү менән дә һөйләшмә, берүк үҙеңдең кемлегеңде белгертәһе булма", — тип киҫәтә ҡыҙын. Александр Викторовичҡа хәбәр ебәреп, Фатима ханым бәләкәй Нинелде замана ғәрәсәтенән ана шулай ҡотҡарып ҡала.

Бер нисә көндән улы Таңды ла шулай Боғоросланда йәшәгән апаһына оҙата. Әсәнең һиҙемләүе алдамай: оҙаҡламай Фатима артынан ҡара машина килеп тә етә.

Ширяев, үҙ яҙмышын ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып, "халыҡ дошманы" балаһын төрлөсә ҡурсалай, уҡырға һәр яҡлап ярҙам итә. Шулай уҡ атаҡлы балерина Галина Уланованың әсәһе М.Ф.Романова-Уланова менән күренекле педагог Е.В.Ширипина ла Нинелдең иң яҡын кешеләренә әйләнә. Нинель Дауыт ҡыҙы был изге күңелле, оло йөрәкле кешеләрҙе әле лә ололап иҫкә ала, үҙен уларға мәңге бурыслы һанай.

Фатима ханымды Пермь өлкәһендәге Явас лагерына оҙаталар. Бер туған апаһы һуңынан ғына уның ҡайҙалығын асыҡлай. Ике йыл буйы юллап, балаларына әсәләре менән күрешергә рөхсәт ала. Ниһайәт, Нинелгә лагерҙа әсәһе менән бик аҙға ғына күрешеү бәхете тейә. Ошо осрашыуҙан һуң ул ата-әсәһенең халыҡ алдында аҙ ғына ла ғәйебе юҡлығын балаларса самимилыҡ менән раҫлап, әсәйһеҙ йәшәүҙең ифрат та ауыр булыуын, уны нисек итеп өҙөлөп һағыныуҙарын тасуирлап, лагерҙан азат итеүен ялбарып, Сталинға хат яҙа. Тик яуап ҡына көтөп ала алмай.

Илгә яңы ҡайғы-хәсрәттәр өҫтәп, Бөйөк Ватан һуғышы башлана. Был дәһшәтле көндәр Нинелдең яҙмышына үҙ төҙәтмәләрен индерә. Йәнә Ленинград менән хушлашырға тура килә.

...Поезд тәгәрмәстәре туҡтауһыҙ тыҡылдай ҙа тыҡылдай. Тамара, Рәйсә, Ғәлиә, Әлфиә әленән-әле вагон тәҙрәләренә ҡапланып, донъяны күҙәтә. Өфөгә етмәнекме әле, тип түҙемһеҙләнәләр. Тик Нинель генә

тәҙрәгә яҡын да бармай. Өнһөҙ генә ултыра бирә. Хатта ”Өфө” һүҙен ишеткән һайын йөрәге ҡыҫылғандай итә. Нимә уйларға ла белмәй ҡыҙыҡай. Сөнки Өфөлә унын көткән кешеһе лә, һыйыныр мөйөшө лә юҡ. Их, хәҙер ошо шыҡһыҙ вагондан йүгереп кенә сығып, әсәһенең йылы ҡосағына һыйынаһы, ҡасандыр бәхет ташып торған фатирҙарына шау-гөр килеп ҡайтып инәһе ине! ”Әсәй, әсәкәйем, — тип бышылдай Нинелдең ирендәре. — Ҡайҙа һин? Таң ағайым, һин ҡайҙарҙа? Атайым, атаҡайым, нишләп һине бер ғәйепһеҙгә ”халыҡ дошманы” иттеләр һуң?” Нинелдең тамағына төйөр ултырғандай була, күҙенә йәш эркелә. Башында һис кенә лә яуап табып булмаҫтай һорауҙар ҡайнаша. Әхирәттәренең: ”Өфөгә етәбеҙ, ана, уттары емелдәй...” — тип шаулашыуҙарына уянып киткәндәй, башын күтәрә ул. Шул минутта үҙенең аяуһыҙ ҙа, бәғерһеҙ ҙә был донъяла япа-яңғыҙы булыуын, ләкин нисек кенә булһа ла йәшәргә, тырышырға кәрәклеген бар асылында төшөнә. Тик нисек йәшәргә һуң? Ун биш йәшлек үҫмерҙең быға аҡылы ла, зиһене лә, тормош тәжрибәһе лә етерлек түгел шул. Унын өсөн иң ҡурҡынысы — ”халыҡ дошманы” балаһы булыу. Аҙым һайын үҙенә шулай тип төртөп күрһәтәсәктәрен белә. Күңелен иң ғазаплағаны шул. Атаһына ҡарата былдай хаҡһыҙлыҡты күңеле һис тә ҡабул итмәй. Ул ифрат кешелекле, инанған коммунист ине. ”Һинең исемең, ҡыҙым, ”Ленин” һүҙенең уң яҡтан уҡылышы, Ленин — бөйөк даһи, беҙҙе бәхеткә сығарған кеше, беҙҙең илебеҙҙә иң бәхетле тормош буласаҡ”, — ти торғайны.

Бына шундай мең төрлө уй-шөбһәләр менән ҡайтып төшә Нинель Өфөгә Ленинградтан. Улар уҡыған хореография училищеһы блокада ҡурҡынысы янаған ҡаланан Пермгә эвакуациялана. Уҡыусыларҙы, шул иҫәптән Өфөнән килгән балаларҙы ла, тыуған яҡтарына ҡайтаралар. Балет сәнғәте серҙәренә яңы төшөнә генә башлаған үҫмерҙәр Башҡорт опера һәм балет театрына ебәрелә.

Шулай итеп, ун биш йәшлек Нинель балет артисткаһы булып китә. Тәүге көндәрҙе ниндәй ғазап менән үткәргәнен үҙе генә белә. Бер төндө Тамара Хоҙайбирҙинала үткәрә, иртәгәһен Бәҙәр апай Йосопованың ишеген шаҡый, Минһажевтарҙа ла йәшәп ала. Һуңыраҡ Достоевский урамындағы бер әбейгә фатирға урынлаша. Ләкин әбей үҙендә ”халыҡ дошманы” балаһы йәшәүен кемдәндер ишетеп белгәс, Нинель театрҙан эштән ҡайтыуға урам ҡапҡаһын аса алмаҫлыҡ итеп бикләп ҡуя. Ҡышҡы урамда ҡапҡа асылғанын көтөп йөрөй торғас, һыуыҡ тамам үҙәгенә үтә ҡыҙҙың. Ул ҡабат театрға әйләнеп килә. Шул көндән уға театрҙа йәшәп йөрөргә рөхсәт итәләр. Хәлдән тайғансы спектаклдәрҙә бейей ҙә, залдан һуңғы кеше сыҡҡанын көтөп тора. Башҡалар өйҙәренә юллана, ә Нинель иһә үҙенең даими йоҡлап йөрөй торған ложаһына йүнәлә. Тамағына йүнле аш теймәй, ятып йоҡларға йылы урын эләкмәй. Аслыҡ-яланғаслыҡ тамам сәләмәтлеген ҡаҡшата. Паекка бирелгән ризыҡтарын кейем-һалымға алмаштыра. Театр түләгән 30 һум хеҙмәт хаҡына ауырлыҡ менән көн күрә. Өҫтәүенә, дифтерия, грипп менән ҡаты сирләп өҙлөгә, йөрәге ауырта башлай. Врачтар башҡаса бейеməҫкә ҡушалар. Тик йәйгә сыҡҡас ҡына бер аҙ хәлләнә төшә ул. Әсәһенең

лагерҙан килгән хаттары, сәхнәгә, балетҡа булған мөхәббәт, йәшлек дәрте йәшәргә ынтылыш, көс бирә уға.

Нинелгә Хоҙай тәбиғи матурлыҡты ла, һәләтте лә ҡыҙғанмаған. Йылдар үткәс донъя балеты күгендә йондоҙ булып ҡабынасаҡ таланты башлап Башҡортостан сәхнәһендә асыла. Ленинградтан ҡайтҡан йәштәр өсөн тәүге һынау булған әҫәрҙе — Делибтың ”Коппелия” балетын Өфөгә эвакуацияланған Украина сәхнә оҫталары менән бергә әҙерләп ҡуялар. Нинель Сванильда партияһын башҡара. Ун биш йәшлек үҫмергә был тиклем дә яуаплы аҙымға йөрьәт итергә Ленинград балет мәктәбенең иң күркәм традицияларын тырышып үҙләштереүе, ундағы донъяға билдәле мәшһүр бейеү оҫталары менән аралашып, уҡыған саҡта уҡ уларҙың фатихаһын алып сәхнәгә сығыуы ҡыйыулыҡ өҫтәй, үҙ-үҙенә ышаныс тыуҙыра. Унның Сванильдаһын тамашасы яратып ҡабул итә.

1943 йылда балет тормошонда оло ваҡиға була. Фәйзи Ғәскәров беренсе башҡорт балеты ”Сыңрау торна”ның либреттоһын яҙа. Музыкаһын Лев Степанов ижад итә. Труппа алдына балетты БАССР-ҙың 25 йыллығына сәхнәләштереү бурысы ҡуйыла. Был эште Хәләф Сәфиуллин үҙ өҫтөнә ала. Ул ярҙам һорап Пермь ҡалаһында эшләгән үҙенең элекке педагогтарына (Ленинград хореография училищеһының шунда эвакуацияла булған сағы) мөрәжәғәт итә. Беренсе милли балет спектакле юғары сәнғәт оҫталығында булырға тейеш, тигән маҡсатты күҙ уңында тота ул. Хәләф Сәфиуллиндың тәҡдимен театр етәкселеге лә хуплай. Әгәр Бөйөк Ватан һуғышының хәл иткес ауыр көндәре икәнен иҫәпкә алғанда, театр коллективының, йәш балет артистарының быға күпме көс һәм тырышлыҡ һалыуын күҙ алдына килтерергә мөмкин. Ленинградта уҡыуҙарын тамамларға өлгөрмәгән йәштәргә шул арала училище программаһын үҙләштереп бөтөрөү ихтималлығы ла ҡыуаныслы яңылыҡ була.

Дәррәү юлға ҡуҙғалалар. Пермдең Офицерҙар йортонда урынлашалар. Унның сәхнәһендә ”буржуйка” яғып йылыналар, туң картуф бешерәләр, репетициялар шунда үтә, төндәрен дә шунда уҡ йоҡлап йөрөйҙәр. Ленинград педагогтары Башҡортостандан килгән йәш артистар менән ең һыҙғанып эшләй. Бер йылдан труппа Өфөгә ҡайта. Был 1944 йылда була. Республика юбилейы тантаналарына Пермдән балет артистары ла саҡырыла. Спектаклде балетмейстер Нина Анисимова ҡуя. Юбилейға спектаклдең бер актын ғына әҙерләп өлгөртәләр. Зәйтүнгөлдө — Зәйтүнә Насретдинова, ә Баш торна партияһын Нинель Юлтыева башҡара. Икенсе составта инде ул Зәйтүнгөлдө бейей. Унан һуң был ролде бер-бер артлы Тамара Хоҙайбирҙина һәм Майя Таһирова сәхнәгә алып сыға. Йәшлектең үҙе кеүек осоп-талпынып торған, әммә тәрән кисерештәргә бай, милли үҙенсәлекле был образды асыу өсөн Нинель бар оҫталығын һала. Ысын дәрт, һирәк осрай торған һығылмалылыҡ, еңел һәм бейек һикереүҙәр, өйөрмәләй өйөрөлөп әйләнеүҙәр, хәрәкәттәренең теүәл һәм сафлығы менән актер оҫталығын раҫлай ул. Зәйтүнгөл образын үҙенә генә хас тәьҫирле алымдар менән аса һәм тамашасы күңелен ихлас яулай. Унан һуң Б.Астафьевтың ”Баҡсаһарай фонтаны”ндағы күңеле аша үткән Мария партияһы менән һөйөндөрә ул тамашасыны.

Театр сәхнәһендә артислыҡ тәжрибәһе алған Нинель училищены бары тик һуғыштан һуң, 1949 йылда тамамлай.

Кеше тормошонда шундай хәл-ваҡиғалар була: улар тормош юлын бөтөнләй уйламағанса үҙгәртә лә ҡуя. 1946 йылда яҙмыш Нинелде Ҡазан ҡалаһына алып килә. Был саҡта инде өлгөргән балет артисткаһы була ул. Был йылдар татар балет сәнғәте өсөн тарихи осор — уның яңы профессиональ юғарылыҡҡа күтәрелеү мәле була. Ике илаһи көс бергә ҡушылғандай итә.

Ҡазан сәхнәһендә ул профессиональ оҫталыҡта яңынан-яңы үрҙәргә күтәрелә. ”Жизель”дәге ихлас күңелле, самими Жизель, ”Шүрәле”ләге — Сөйөмбикә, ”Баядерка”лағы фажиғәле яҙмышлы Никия... Был партиялар артистканың күп яҡлы талантын тулы асырға мөмкинлек бирә. Шулай ҙа һәр балеринаның классик оҫталығына үҙенсәлекле үлсәм — ул ”Аҡҡош күле”ндәге Одетта — Одиллия партияһылыр.

Был ролгә Өфөлә саҡта уҡ күңеленән әҙерләнеп йөрөй Нинель. Хыялындағы үтә ҙур оҫталыҡ талап иткән партияны ул беренсе тапҡыр Ҡазан тамашасыһы хөкөмөнә сығара. Нинель Ҡазан сәхнәһендә теүәл егерме йыл (1946—1966 йылдар) бейей.

Илленсе йылдарҙа Нинель Юлтыева үҙен балетмейстер булараҡ та һынап ҡарай. Тәүҙә балет труппаһында балетмейстер булмағанға сараһыҙҙан ғына тотона был эшкә. Ә ижади эш уның яңы талантын асырға ярҙам итә. Сараһы ла сыға тигәндәй: 1956 йылда Муса Йәлил исемендәге Татар дәүләт опера һәм балет театрының яңы бинаһын асалар. Уны асыу тантанаһына әҙерләнгән спектаклдәрҙең береһе Нинель Юлтыева ҡуйған ”Аҡҡош күле” балеты була.

Нинель Дауыт ҡыҙы барлыҡ классик репертуарҙы тамашасының ғүмерлеккә хәтерендә ҡалырлыҡ дәрәжәлә бейеп сыға. Сәхнәнән һуң инде үҙен балетмейстер һәм педагог хеҙмәттәренә бағышларға мөмкинлеге арта. Ул артистарға классик бейеү дәрестәре бирә, репетициялар үткәрә. Ләкин тормошта ла, сәхнәлә лә идеалға ынтылыусан Нинель был йүнәлештә лә үҙешмәкәр булып ҡалырға теләмәй. Йәнә Ленинградҡа юл ала.

Илаһи тормош миҙгелдәре ҡабатланмай, тиһәләр ҙә, ҡабатлана икән. Уҡырға тип Ленинградҡа был юлланыуында ла Нинелде әсәһе оҙатып ҡала. Тик үткән ғүмерҙәрҙе һәм атайҙарын ғына кире ҡайтарып булмай шул. Фатима апай ун йылдан ашыу ГУЛАГ ғазаптарын кисергәндән һуң ҡыҙы янына ҡайта. Йәше олоғайған, сәләмәтлеге ҡаҡшаған әсәһенә ҡыҙы ҡулынан килгәнсә ҡәҙер-хөрмәт күрһәтә. Фатима апай ҡыҙының спектаклдәрҙә бейеүен дә, уның халыҡ тарафынан данланыуын да күреп һөйөнә. Шөкөр, ейәне Мансурҙы тәрбиәләүҙә ярҙамлаша. Таң улын да һаҡлап ҡала ала ул. Ә һуғышта фәрештәләре һаҡлағандыр баламды, тип әйтә торған була. Сөнки Таң Дауыт улын, ”халыҡ дошманы” балаһы булараҡ, штраф батальонына ебәрәләр. Ләкин ул һуғыштан иҫән-һау ҡайта. Тик иренең генә бер ғәйепһеҙгә ғүмере өҙөлөүе өсөн йөрәге ғүмере буйы һыҡрай Фатима ханымдың. Шул китеүҙән ғәйеп була Дауыт Юлтый. Уның ни рәүешле үлтерелгәнен, бер ғәйебе юҡлығын раҫлаусы берәр ҡағыҙ булһа, әсәһенең йөрәк яралары аҙ ғына һыҙлау-

ҙан туҡтар ине. Шул уй менән Нинель ике йыл буйы Мәскәү юлын тапай. Ниһайәт, атаһының ҡайҙа һәм ниндәй шарттарҙа, кем тарафынан атып үлтерелеүе хаҡында архив яҙмаларын таба. Ил һәм халыҡ алдында бер ғәйебе булмағанлығы ла раҫлана. Фатима ханым ғүмере буйы күңеле менән әлеге хәбәрҙәрҙе көтөп йәшәһә лә, хәсрәттәре ҡабат яңыра. Ни ҡылаһың, һуңғы һулышына тиклем ире тураһында иҫтәлектәр менән генә йәшәргә ҡала.

Нинель Ленинградта Н.А.Римский-Корсаков исемендәге консерваторияның балетмейстерҙар әҙерләү бүлеген тамамлай. Унан алдараҡ үҙе элек уҡыған хореография училищеһының педагогия бүлексәһендә белем ала. Уның Ленинградтан уҡып ҡайтыуы ижади тормошонда яңы осорҙоң башланыуы менән билдәләнә. 1972 йылда Нинель Дауыт ҡыҙын Ҡазан мәҙәниәт һәм сәнғәт академияһының хореография кафедраһы мөдире итеп тәғәйенләйҙәр. Уның талантын, ижади мөмкинлектәрен, тәжрибәһен һәм белемен тағы ла лайыҡлы баһалау була был. Бөгөн инде илдең төрлө сәхнәләрендә уның 400-ҙән ашыу уҡыусыһы эшләй. Араларында танылған талант оҫталары бихисап. Барыһы ла үҙҙәренә белем һәм һөнәр биргән көслө рухлы, балет сәнғәтенә мөкиббән уҡытыусылары Нинель Юлтыеваға рәхмәтле.

Уның уҡыусыларын донъяның төрлө тарафтарында осратырға мөмкин. 1974—1977 йылдарҙа ул Египетта эшләй. Ҡаһирә балет труппаһының баш балетмейстеры һәм художество етәксеһе була. Талантлы педагогтың Ҡаһирәлә оҙаҡҡа ҡалыуын үтенәләр. 1981—1983 йылдарҙа — Т.Кареньо исемендәге Каракас театрында (Венесуэла) балетмейстер, ә һуңыраҡ уға йәнә Ҡаһирәлә эшләргә тура килә. Египет балетын халыҡ-ара дәрәжәгә күтәреүҙә Нинель Дауыт ҡыҙының роле баһалап бөткөһөҙ ҙур. Ул эшләгән йылдарҙа труппа Япония, Югославия, Болгария, Сүриә һәм башҡа илдәрҙә сығыш яһай, үҙен донъя кимәлендә таныта. Нинель Юлтыева етәкселегендә балет оҫталары халыҡ-ара конкурстарҙа бер-бер артлы еңеүгә өлгәшә.

*II Бөтә донъя башкорттары королтайы, 2002 йыл. Нинель Юлтыева Мостай Кәрим һәм Фәриҙә Ҡудашева менән*



Нинель Юлтыева үҙенең алты тиҫтә йылдан ашыу ғүмерен хореографияға — балерина, балетмейстер, педагог хеҙмәтенә бағышланы. Бөгөн дә арыу-талыуһыҙ хеҙмәттә ул — Ҡазан хореография училищеһының художество етәксеһе, профессор.

— Үҙең ниндәй генә дәрәжәләргә ирешмә, нисек кенә танылма, был әле шәхес булыу тигән һүҙ түгел, — ти Нинель Дауыт ҡыҙы. — Иң мөһиме — белгәнеңде башҡаларға,

бигерәк тә йәштәргә өйрәтеү. Миҫалға, Галина Улановала алайыҡ. Күпме йәштәрҙең талантын асҡан, уларҙы тәрбиәләгән. Ысын мәғәнәһендә ҙур шәхес шундай була.

Нинелдең исеме үҙе иҫән саҡта уҡ балет сәнғәтенең тарихына алтын хәрефтәр менән яҙылған. Бер юлы өс йөмһүриәттең — Рәсәйҙең, Башҡортостандың, Татарстандың халыҡ артисы исемен йөрөтә ул. Ә ундайҙар илдә нисәү генә икән?

2006 йылдың февралендә Ҡазан опера һәм балет театры бинаһында Нинель Юлтыеваның 80 йәшлек юбилейына бағышланған ҙур кисә булды. Унда Рәсәйҙең һәм донъяның төрлө тарафтарынан мәшһүр балеринаның талантын ололаусылар һәм кисәге уҡыусылары йыйылды. Тантанала Башҡортостандан да абруйлы делегация ҡатнашты.

Нинель Юлтыева ике туғандаш республиканың да яратҡан, ихтирамлы ҡыҙы булып ҡала. Яҡташтары уның Өфөгә һәр ҡайтыуын көтөп ала. Нинель өсөн йән атып торған ғәзиз ағаһы Таң инде мәрхүм. Уның ҡатыны Сәүиә янына ҡайта ул. Бында күрешер кешеләре лә, һөйләшер һүҙҙәре лә күп.

...Ҡайтҡан һайын ул әлегеләй Ленин урамындағы таныш йорт янына килә, өйҙәренең бала саҡ күҙҙәре кеүек тойолған тәҙрәләренә баға. Үткәндәрҙең бәхетле лә, тетрәндергес ҡайғылы ла көндәре бер-бер артлы хәтерендә яңыра Нинель Дауыт ҡыҙының.

— Үткәндәр үткәндәрҙә ҡаласаҡ, — ти ул йыш ҡына оло сабырлыҡ менән.

Шул тиклем дә һынаулы яҙмышты үтһә лә, уның йөрәге бер кемгә лә үпкә-рәнйеү һаҡламауына хайран ҡалаһың. Ә бит ағаһы Таңға ла, Нинелдең үҙенә лә тиҫтә йылдар буйы үҙҙәренең ”халыҡ дошманы” балалары түгеллеген раҫлап йәшәргә тура килде. Әммә замандың үҙ яҙмыштарына төшкән аяныслы ғазаптарына бөгөлмәҫ рухи көс һаҡлай уларҙы тормошта. Атайҙары, күренекле башҡорт яҙыусыһы Дауыт Юлтый һәм әсәләре Фатима ханым күрергә теләгән дәрәжәгә ирештеләр. Ләкин Нинелдең күңелен бер нәмә борсой: барып баш эйер өсөн атаһының ҡәбере генә лә юҡ, исмаһам. Атып үлтерелгән ерҙән тупраҡ алып ҡайтып ҡәберлек яһарға һәм музейын булдырырға ине лә бит!

Шундай үтенестәр менән заманында Таң Дауыт улы рәсми органдарға хаттар ҙа яҙып ҡараны. Ләкин һүҙ ниңәлер вәғәҙәләрҙән ары китә алманы. Нинель Юлтыева атай рухы һәм заман алдында үҙен бурыслы һанай. Юғиһә, музейға етерлек материалдар ҙа тупланған. Таң ағаһы ғүмере буйына йыйған экспонаттарҙың һәр ҡайһыһы тарихи әһәмиәткә эйә.

Татарстанда Нинель Юлтыеваны ”Балет донъяһының көслө рухлы, бай күңелле, нескә хисле аҡҡошо” тип йөрөтәләр. Эйе, беҙҙең Башҡортостан еренең, тыуған төйәгенең бар гүзәллеген йыйған Аҡҡош ул. Ҡоштар яҙҙарына әйләнеп ҡайтҡан кеүек, уның да күңеле әленән-әле тыуған еренә талпына... Ә аҡҡоштарҙың ҡайтыр күле була. Нинель Дауыт ҡыҙына ла ҡайтҡан саҡтарында ата-әсәһе рухын, бала саҡ иҫтәлектәрен һаҡлаған йорто ишек асһын ине. Шундай өмөт менән баға ул тыуған Башҡортостанына.